*Аман ЮЛЪЯҠШИН*

# ҒҮМЕРҘЕҢ БЕР МИҘГЕЛЕ

*(Ж.Кейекбаев тураһында иҫтәлек)*

1966 йыл. Июль айы. «Дубки» пионер лагерына улыбыҙ Урал янына барып ҡайтып киләбеҙ. Йоманан шәмбегә ҡаршы төндә күк күкрәп, йәшенләп ҡойма ямғыр яуҙы. Ә иртәгәһен көн салт аяҙ булды ла китте. Бөтә тәбиғәт йәм-йәшел, хуш еҫле сәскәләр еҫенән һауа тағы ла сафланып киткәндәй. Нисектер, ошо тәбиғәт хозурлығы үҙе күңел күтәренкелеге бирә.

Ул саҡта лагерға юл курорттың нәҡ уртаһынан үтә ине. Мотоциклда бысраҡ, колеялы юлдан үргә менеп барабыҙ. Шул саҡ исемемде әйтеп һөрәнләнгән тауыш ишеттем.

— Кем ҡысҡыра ул? — тип ҡатыныма өндәштем. Ул:

— Туҡта әле, Жәлил ағай ҙа баһа... — тигәс, йәтешерәк ергә барып туҡтаным.

— Әссәләмәғәләйкүм, иҫәнмеһегеҙ, Жәлил ағай, — тип күрешергә ике ҡулымды һуҙҙым. Хәл-әхүәл һорашып алғас, ул:

— Ҡайҙан ҡайтып киләһегеҙ бынау бысраҡта? — тип ихлас йылмайып һорағас, мин әҙерәк сиртергән булып:

— Бына пионер лагерына малай янына барып ҡайтып киләбеҙ, икәүҙән-икәү генә үҙемдең «лехковойҙа», — тинем.

Ул шунда уҡ:

— Һәллә, — ти һалды. Шунан тирә-яҡты яңғыратып шарҡылдап көлөштөк. (Жәлил ағай үҙе менән әңгәмәләш булған берәй кеше арттырыңҡырап, фәстереп ебәрһә, ошо һүҙҙе әйтә торғайны).

Беҙ көнбайыш яҡҡа, шыршылы тау битенә ҡарап үләнгә ултырҙыҡ. Тау буйлап өҫкә һөҙәкләтеңкерәп юл күтәрелә. Бер ни тиклем һүҙ туҡтаған арала Жәлил ағай ошо тауға ҡарап торҙо ла, серле генә итеп:

— Бына ошо ер Туҡтамыш ҡырлаһы тип атала, — тине.

Ә мин, уның быға тиклем нисек аталғанын белмәгәс, икенсе яҡҡа йор һүҙ менән ҡыялатып, элек Сәйетбабала эшләп киткән бер кешенең фамилияһына һылтауланып мәрәкәләнем. Ул көлөп алды ла, тағы:

— Эйе, Туҡтамыш ҡырлаһы була был, — тип һүҙен раҫлап ҡуйғандай итте.

Был атаманы мин Жәлил ағай вафат булғас сыҡҡан «Туғандар һәм таныштар» тигән китабынан тағы бер табып, үҙемдең ул саҡтағы мәрәкәләүемдең урынһыҙ булыуына, ысынлап та шулай аталғанына ышандым.

Шулай һөйләшеп ултырғанда арттан тауыш ишетелде. Әйләнеп ҡараһаҡ, һатыусы Вәғиз төшкө аштан һуң килеп магазинын асып тора. Шул яҡҡа ынғайланыҡ.

Магазин эсенә күҙ йөрөтөп алғас, ағайым әллә нисә йондоҙ төшөрөлгән бер шешә һатып алды. Унан күрмәксе мин дә алдым. Шунда Жәлил ағай:



09.2002.p65 30 04.09.02, 9:32

— Ә һин ниңә алдың әле был нәмәне? — тип һораны.

— Һеҙ алғас, миңә лә тейештер инде, — тигән булдым. Ул:

— Иртәгә Фәйзулла ағайҙар бында килергә тейеш, мин шуға алдым... — тип минең эстән генә уйлаған уйымды юҡҡа сығарҙы.

Фәйзулла Вәлиевич — райсовет рәйесе. Әле күптән түгел ҡайтанан ойошторолған районға килеүенә ҡарамаҫтан, беҙҙең яҡтың арҙаҡлы кешеләрен таный һәм ололоҡлай, иғтибарлы, һәр кемгә айыҡ баһа биргән кеше ине. Күрәһең, Жәлил ағайҙын да бында ял итергә килеүен ишеткән, шуға ваҡыт табып, хәл белешеп килеп сығырға булғандыр.

Жәлил ағай менән Вәғиз икәүләп һыу буйына сығып, байтаҡ ваҡыт һөйләшеп, урын һайланы. Килешеү буйынса Вәғиз иртәгә бик иртә генә балыҡҡа барып ҡайтырға ниәтләне.

Кис аяҙ булды. Иртән торғас Вәғиз: «Әһә, көн матур икән, юл уңырға тейеш», — тип һөйөнөп юлға сыҡты. Бараһы ер 20 саҡырымлап. Иртә торған уңыр, тигәндәй, ул балыҡсыны тап итте. Ҙур ялғаш эсендә шап-шоп итеп йыбырлашып ятҡан балыҡтарға күҙ һалды. Уларҙы һыулы һауытҡа һалып алды. Ҡайтыу менән үк балыҡтарҙы ҙур ялғашҡа һалып, һыуын алыштырҙы. Шунан ҙур ҡәнәғәтлек тойғоһо менән Жәлил ағайҙы эҙләп китте.

— Жәлил ағай, балыҡ булды, бик шәп килеп сыҡты, — тип, нисек барып ҡайтыуын һөйләне.

— Алай булғас, Вәғиз мырҙам, уларҙы тере килеш һаҡларға тырыш әле, тегеләр килгәнсе, — тине. — Ҡармаҡтар алырға ла онотма.

Кисә яуған ямғырҙан һуң үләндәр күтәрелеп киткән. Тәбиғәт үҙенең илаһи гүзәллеге менән күңелдәргә дәрт өҫтәй.

Көн үҙәге етер-етмәҫ еңел машина килеп туҡтаны. Унан кешеләр төшөп, корпустар яғына ыңғайланы. Райком секретары Әсҡәт Әхмәтулы ла килгән. Уларға ҡаршы аллеялар араһынан Жәлил ағай ҙа килеп сыҡты. Иҫәнлек-һаулыҡ һорашып алғас, күңелле хәлдәр һөйләшеп, көлөшә-көлөшә, шыршылар араһына үтеп, тейендәр янына килделәр. Усҡа ҡыҙған көнбағыш һалып ҡулды һуҙһаң, тейендәр һаҡ ҡына килеп көнбағышты алып китә, ашағас тағы килә. Быға са ундай хәлде күрмәгән ҡатындар: «Урман кейеге лә ҡулға эйәләшә икән ә!» — тип аптырашты. Тейендәр генә түгел, турғайҙар ҙа ем барын һиҙеп, сырҡылдашып был тирәлә урала. Бер турғай Мәфтуха апаның ҡулынан ем алып, осоп та китте. Уның артынса башҡалары ла ҡыйыуланды.

Ял итеүселәр ошо тейен һәм турғайҙарҙы ашатыуҙан, йәнле тәбиғәт менән аралашыуҙан ғына ла донъяларын онотоп, рухи кинәнес ала.

Ә айыуҙар тирәһендә халыҡ айырыуса күп, дауаланырға яңы килгән кешеләр, бигерәк тә ҡаланан, ялан яҡтарынан килгәндәр өсөн былар торғаны бер кәмит.

Жәлил ағай бер аҙ килгәс сәғәтенә ҡарап алды ла:

— Ярар, ярар... Ҡуй әле, туғандар, айыу нисә күрһәң дә айыу инде ул. Моғайын, Бөрйән айыуынан бындағыһының айырмаһы юҡтыр... Яҡтыкүл айыуы ғына алаҡола булмаһа, — тип, Әсҡәт ағайға ҡарап йылмайып, күҙен ҡыҫты.

— Һеҙ машина янына бара тороғоҙ, мин хәҙер ҡыуып етермен, — тип ятаҡ корпусына инеп китте. Күп тә тормай, кистән әҙерләп ҡуйған әйберҙәрен алып, Жәлил ағай килеп тә етте. Ике ҡулында ла байтаҡ әйбер тотоп килгән Жәлил ағайҙы күргән ҡатын-ҡыҙҙар:

— Ниңә ярҙамлашмайһығыҙ, ҡунаҡ кешенән әйбер күтәртеп йөрөйһөгөҙ, — тип шелтәләп алды.

Тегеләре:

— Китә тороғоҙ, тип әйткәс ни үҙе... — тип был уңайһыҙлыҡтан үкенесле генә итеп аҡланған булды.



09.2002.p65 31 04.09.02, 9:32

Кисәгә һөйләшеү буйынса, Вәғиз балыҡтарҙы алып Көгөш йылғаһының үргә яғына, билдәләнгән ергә барып урынлаша торҙо (Көгөш—Усолка йылғаһының ысын исеме). Ул башын һыуға эйеп үҫкән бер ағастың ботағы аҫтына йәтешләп ултырҙы ла, ҡулаһындағы балыҡтарҙың һыуын түгеп, таҙа һалҡын һыу менән алмаштырҙы.

Йылға тау араларынан килеп сыҡҡас, был тирәләрҙә кәкерсәк-бөкөрсәк әйләнештәр яһап, урыны-урыны менән ағас тамырҙарын өңөп, ҙур булмаған ятыуҙар яһап, талғынырак аға һәм ике яҡлап ағастар ышығында булғанғамы, ифрат һалҡын. Аҫтараҡ шифахана эргәһендәге шишмәләр килеп ҡушылғас, Красноусолға килеп еткәс тә йылға һаман һалҡынлығын юғалтмай.

Машина тауышы ишетелеү менән Вәғиз аҫтына һалған үләндәрҙе рәтләне, балыҡлы ҡуланы яҡынырак тартып, өҫтөнә япраҡлы сыбыҡтар һалды, үҙе шым ғына боҫто.

Әйберҙәрҙе үләнгә түшәлгән балаҫ өҫтөнә бушатҡас, утын әҙерләүҙе шофер егеткә ҡуштылар. Ә сәйгүн, ҡула элергә ҡаҙыҡтар ҡағыуға Фәйзулла ағай үҙе тотондо. Жәлил ағай йылға буйында ятҡан бер ҡармаҡ сыбығын табып алды ла, ҡармағын урап ҡуйған тәпелдеректән һүтеп сыбығына бәйләне. Әҙерләп ҡуйған селәүенең һауыты курортта ятаҡ алдындағы үлән араһында онотолоп ҡалыуын иҫләп:

— Бына шайтан, хәтерең... — тип ҡуйҙы.

— Ни булды?

— Селәүҙәр онотолоп ҡалған.

— Машина менән барып килегеҙ улай булғас...

— Ярай, бында селәү бөткәнме ни? — Жәлил ағай Әҫкәт Әхмәтовичты алып селәүгә китте. Улар аҫкараҡ төшөп, бәләкәйерәк ағас төбөн үләндән йолҡоп таҙарттылар ҙа, ағас олонон төрлө яҡҡа һелкетә башланылар. Быңдай ысулды тәү күргән Әҫкәт ағай:

— Как, как это так? Бында ниндәй селәү булһын? — тине гәжәпләнеп.

Ағас тамыры ҡуҙғалған ерҙән берәм-берәм селәүҙәр килеп сыға башланы.

— Миңә ошоноһо етеп торор, тағы сыҡһалар, миңә килтерерһең, — тип Жәлил ағай Вәғиз менән һүҙ ҡуйышҡан ергә барып ҡармағын селәүләп һыуға ырғытты. Янында бер кем дә булмағанын күреп, Вәғиз еңел генә тамаҡ ҡырҙы, әҙер икәнлегенә ишара яһаны. Ул теге тимерсыбыҡ ырғағы менән һыу эсенән ҡармаҡты тартып алды ла уға бер тере балыҡты эләктереп ебәрҙе. Жәлил ағай ҡармаҡ сыбығын тартты ла шым ғына был балыҡты шыптыр тоҡсайына һалып ҡуйҙы. Икенсе тапҡыр ырғытҡанда ярты кило самаһы ҡорман балығын, артабан бер ҙур ғына ажауҙы ҡаптырҙы...

Бер-ике селәү тотоп, Әҫкәт ағай ҡармаҡсы эргәһенә килде. Жәлил ағай шыптыр тоҡсайындағы балыҡтарҙы аш-һыу әҙерләгән ҡатын-ҡыҙҙарға алып барып биреүен һорап, Әҫкәт Әхмәтовичҡа һондо. Ул балыҡты күреү менән аптырабыраҡ ҡалды. Ут тирәһендә мәшғүл булып йөрөгән ҡатын-ҡыҙҙар:

— Ҡара әле, Көгөштә лә шундай балыҡтар бар икән дабаһа... Вәт әй, Жәлил оҫта балыҡсы икән дә... — тип, бер-бер артлы маҡтаналар.

Ҡатын-ҡыҙҙар балыҡтарҙы таҙартырға тотонғас, ирҙәр Жәлил ағай эргәһенә ыңғайланы. Ә Жәлил ағай балыҡтарҙы ҡаптыра ла, тағы емле ҡармағын:

— Балығым, ҡап-ҡап, ҡармағымды йота һал да яр башында ялтырап ят! Тьфу-тьфу! — тип ырғыта ла ырғыта.

Эш Жәлил ағай уйлаған «сценарий» буйынса бара.

Бөрйән яҡтарынан булған Фәйзулла Вәлиевич ҡармаҡ менән балыҡ ҡаптырыуҙың сәмсел оҫтаһы ине. Ул Жәлил ағай эргәһенә килеп:

— Ҡана, бир әле ҡармағыңды, мин дә бәхет һынап ҡарайым, ма-

лай сакта һыу буйынан ҡайтмай торғайным, — тип ҡармаҡ сыбығын алды.

Вәғиздең ҡулаһы төбөндә ике суртан шап-шоп бәрелә.

Фәйзулла ағай ҡармаҡтағы емде йүнәтеп, йәтеш кенә итеп, ҡултыҡланып ағастар төбөнә инеп торған ятыуға ырғытып ебәрҙе. Шунда уҡ һыуҙағы ваҡ сабаҡтар сеЛәүҙе кемуҙарҙан өҙгөләй башланы. Балыҡсы ҡармаҡты ҡапыл тартыуы булды, әләгеп өлгөрмәгән сабаҡ һыуҙан бер сирек күтәрелгәс, шап итеп төшөп ҡалды.

— Иртәрәк тарттым, ахырыһы, — тип һөйләнә-һөйләнә ул ҡармаҡтағы селәүҙе йүнәтте лә тағы ырғытты.

Вәғиз бик һаҡ ҡына ырғағы менән һыу эсенән ҡармаҡты табып алды ла, биҙрәнән ике килонан артығыраҡ суртанды алып, ауыҙынан элеп һыуға ебәрҙе. Биҙрәлә хәлһеҙләнгән балыҡ һыуға төшкәс, ирек тойоп, нығыраҡ болғанды. Ҡармаҡ сыбығының тартылғанын һиҙеп, Фәйзулла ағай һаҡ ҡына тарта башланы. Инде һайға сығып суртандың һырты күренгәс, үҙенә үҙе ышанмай:

— Бына һиңә бәхет... балыҡ, — тип һөйләнә-һөйләнә епте нығыраҡ тартыуы булды, инде сығып етте тигәндә генә балыҡ ҡармаҡтан ысҡынып китте һәм һыуға табан шыла ла башланы. Ул арала булмай, суртанды йәтешләп тоторға иткәндә ағайҙың ҡулынан лайлалы балыҡ шылып төшөп тә китте. Балыҡ һыуҙың ағын еренә етеп тә бара. Күп уйлап та тормай, бер ырғыуҙа ағып китеп барған балыҡтың өҫтөн күкрәге менән ҡапланы һәм ике ҡуллап һыу эсенән кәртәләп балыҡтың юлын быуҙы. Инде балыҡтың бындалығын тойғас, бер ҡулы менән башын, икенсе ҡулы менән ҡойроғонан тотоп, суртанды алып сыҡты.

Был хәлде ҡарап тороусы Жәлил һәм Әскәт ағайҙар:

— Тота һал, ысҡындыра күрмә! — тип дәрт биреп тора торғас, инде суртандың балыҡсы ҡулында булыуын күреп: — Вәт, маладис, оҫта ла, сос та балыҡсы икәнһең, Фәйзулла ағай, — тип дәррәү маҡтанылар.

Ә Вәғиз был ваҡытта тауыштынһыҙ ғына баяғы хатаһын нисек төҙәтеү сараһын тапты. Был юлы ул бер бәләкәй балыҡты биҙрәлә ҡалған суртандың ауыҙына уҡ тығып ҡуйҙы.

Фәйзулла ағай ҙур ҡәнәғәтлек менән суртанды ҡатын-ҡыҙҙар янына алып килде.

— Оһо-һо-һо! — тип ҡаршы алдылар уны. Ә ағайыбыҙ шатлығынан:

— Мәфтуха, йөрәкте тотоп ҡара әле, күкрәктән сығып китеп ҡуймаһын, — тип мәрәкәләне.

— Сыҡмай ни, сығыр шул, бындай ҙур балыҡты байтаҡтан бирле үҙең тотҡаның юҡ бит, — тип яуапланы. — Бәй-бәй, әллә балыҡ артынан һыуға ла сумған инде?! — тип һыуланған кейеменә иғтибар итте.

Ә Жәлил ағай ҡармаҡты емләне лә:

— Әйҙә, Әскәт мырҙам, һин бәхетеңде һынап ҡара, — тип ҡармаҡ сыбығын тотторҙо.

Быға тиклем балыҡ ҡармаҡлағаны булмаһа ла, башҡа кешегә ҡарап тороп, шуға оҡшатып, ҡармаҡ сыбығын һелтәп ебәрҙе. Ағын ҡармаҡты эскә индереп алып китте. Ул балыҡ эләккән һымаҡ тойоп, ҡармаҡты тартып сығарҙы, ләкин бушҡа булды.

— Ҡабаланма, әҙерәк сабыр итеп, көтөп тор, — тип иҫкәртте Жәлил ағай.

Ә Вәғиз ултырған еренән баяғыса ҡармаҡты тартып алып, бәләкәй балыҡ ауыҙына эләктерҙе лә кире суртандың ауыҙына тығып ҡуйҙы. Балыҡ йөҙөп китеп ҡармаҡ һабын һелкетеүе булды, балыҡсы ҡапыл тартты, нәҙек жилка саҡ өҙөлмәне. Балыҡтың ысҡынып китеүенән ҡурҡып, Әскәт Әхмәтович бөтә иғтибарын биреп, доньяһын онотоп ҡармаҡ сыбығын ҡырсынға ырғытты, һыу ситендә балыҡ шап та шоп

килеп һыуға ыңғайлағандай булғас, башындағы капрон эшләпәһе менән суртандың башын басты. Ул ҡаныҡып китеп шул тиклем ныҡ басты, хатта балыҡтың башы иҙелде. Жәлил ағай ҙа :

— Бына шулай, мырҙам, һәр кемдең бәхете үҙе менән йөрөй ул. Һинең бәхеткә лә ана ниндәй суртан ҡапты бит, — тип Әсҡәт ағайҙың шатлығын ҡеүәтләп ебәрҙе.

Былар һөйләшә-һөйләшә ут янына килеп етеүгә унда табала тәмле еҫтәр сығарып балыҡ ҡурыла, сәй ҙә ҡайнағайны.

Ҡатын-ҡыҙҙар ҡулала бешкән тауыҡ итен алып, таҙартҡан балыҡтарҙы шул һурпаға һалып ебәрҙе.

Фәйзулла ағай килтергән ҡымыҙҙы ашъяулыҡ өҫтөнә ултыртты ла, аш тоҙон тәмләп ҡараған һымаҡ, ҡымыҙҙы тәмләне, шунан:

— Самай үҙе! — тип йылмайҙы.

Көн бик эҫе, шунлыҡтан ҡымыҙ ҙа йылынған. Ул асҡан һауыттан башҡаларын йылғаға ултыртып ҡуйҙы.

Тәбиғәт... Уның һәр миҙгеленең үҙенә күрә йәме бар. Тәбиғәттең һәр миҙгеле йылдың бер дәүерендә булып, үҙендә йәшәгән бәндәләренә шул ваҡытҡа ғына хас булған билдәле бер матурлыҡ, хозурлыҡ бирә. Илаһи бәндәләре унан ләззәтләнеп, рухланып, шатланып күккә аша, улар донъяла иҫән-һау көйө ошо хозурлыҡты күреп, тойоп, уның менән һоҡлана, уны ҡәҙерләй һәм үҙе лә һиҙмәҫтән уянған хис кеше рухына йә шиғыр булып, йә йыр булып, йә күҙ йәше ҡатыш көләү булып уның күкрәгенән сығып һауаға күтәрелә.

Бына әле бөгөн дә, сәскәләрҙән-сәскәләргә ҡунып, бал ҡорттары, иңкештәр, күбәләктәр оса. Үлән араһында бытбылдыҡтар, еләк турғайҙары, уларға өҫтәлеп, ҡыуаҡ араһындағы ҡоштар сутылдауы, ял итеүселәрҙең күңелле көләү тауыштары ҡушылып, сәскәләр диңгеҙенән бөрккән хуш еҫтәр даръяһында ғәйәт мөғжизәле, сихри симфония тыуа ине. Ошо тәбиғәттән күпме йәшәү көсө, сәләмәтлек, шифа алабыҙ, ғүмеребеҙҙе оҙайтабыҙ, ризыҡ табабыҙ, эҫелә бешһәк тә, һыуығында өшөһәк тә, һауығыу сараларын унан табабыҙ. Шуға күрә лә беҙ тәбиғәт, Тыуған ер — Әсә тибеҙ. Тик уның ҡәҙерен генә белеп еткермәйбеҙ...

Һалынған ҡымыҙҙы эсеп алғас, һәр кем ашъяулыҡтағы ризыҡҡа үрелде. Икенсе мәртәбәгә ҡымыҙҙы һала башлағанда Вәғиз пәйҙә булды. Пчелосовхоздан ҡайтып бара, йәнәһе.

— Иҫәнмеһегеҙ, һаумыһығыҙ! — тип сәләм бирҙе ул.

— Барыбыҙ ҙа иҫән-һау, күреп тораһың, ҡустым.

— Аштарығыҙ тәмле булһын, ялығыҙ күңелле үтһен!

Уға яуап итеп Жәлил ағай:

— Шулай булһын, уртаһында һин дә бул, мырҙам! — тип, ҡайтыу яғына ыңғайлап бер ике аҙым яһаған Вәғизгә үҙе эргәһенән урын бирҙе.

Ҡымыҙ, саф һауала йөрөп ашап алғандан һуң, һыуһынды ҡандыра, эсеү өсөн тәмле лә, ғәйрәтле лә ине. Шунлыҡтан, күлəгәлә ултырһалар ҙа, тәнгә үҙенә күрә генә мөләйем бер йылылыҡ биреп, бит алмаларын алһыуландырып ебәрҙе.

Ҡатын-ҡыҙҙар һуғыш йылдарында донъя ауырлыҡтарын еңеләйтә торған яратҡан йырҙарынан «Сәрмән»де башлап ебәрҙе. Йырҙың тәүге куплетын улар үҙҙәре генә йырланы, ирҙәрҙән ҡушылыусы булманы.

— Әнә шулай... — тип ҡеүәтләне кемдер.

Икенсе куплетты башлауға Жәлил ағай мандолинаһын алды ла йырлаусыларға ҡушылып уйнап ебәрҙе. Быныһы бигерәк шәп килеп сыҡты: мандолинаға ҡушылып тағы ла дәртләнеберәк йырлай башланылар, тирә-яҡҡа матур моң таралды. Жәлил ағай мандолинала бик оҫта, көйҙө еренә еткереп уйнай. Аралаш көйҙөң кәрәкле урын-



09.2002.p65 34 04.09.02, 9:32

дарында медиаторын әүәлге уйнай торған урынынан күсереп, ҡылдарҙы күтәреп торған тәпәлдерегенең артҡы яғынан да сиртеп, әллә ниндәй матур тауыштар сығарып, көйгә сихри моң өҫтәй.

Фәйзулла ағай тамағын ҡырып алды ла, үҙенә генә хас оҫталыҡ, һыҙым һәм моң менән боронғо халыҡ йыры «Ғилмияза»ны һыҙып ебәрҙе. Аҙаҡ ул йырҙың легендаһын да һөйләп алды һәм:

— Ғилмияза Бөрйән ҡыҙы булған, — тип ғорурлыҡ менән әйтеп ҡуйҙы.

Жәлил ағайҙың да йырлар йыры бар ине. Ул алдағы йырсынан көслөрәк һәм иркенерәк итеп йырлап ебәрҙе:

Аҡъял ғына саптар, һай, атымды
Әпсендәре юҡ тип үк һатмағыҙ.
Минән генә ҡалған, һай, ир
баланы
Атаһы ла юҡ тип, һай,
ҡаҡмағыҙ...

Был йыр «һанаҡа» ине. Уны был тирәлә «Ҡаранйылға һанаҡаһы» тип тә йөрөтәләр. Легендаһы буйынса, XIX быуат башында Ҡаранйылға ауылынан Хәбибрахман тигән ирҙе, ирек, ғәҙеллек һәм хоҡуҡ даулап власть кешеләре менән әйтешкән өсөн, Себергә ебәрәләр. Алып киткән саҡта Ҡаранйылға менән Сәйетбаба араһындағы Олоҡабаҡтыны менеп барғанда ошо йырҙы йырлаған. Ә һөргөндән ҡасып ҡайтҡас, ошо ауыл эргәһендәге Кәзәташы тигән ҡаянан таң менән ҡатын-ҡыҙҙар һыйыр һауырға сыҡҡан мәлдә йырлай торған булған. Уны тыңлаған һауынсылар һөттө биҙрәнән ситкә һая торған булған, тиҙәр. Ошо тирә ауылдарҙағы кешеләр был йырҙы мәжлестәрҙә яратып йырлайҙар.

Йыр бөтөүгә, күмәкләшеп:

— Һай, афарин, әнә шулай, әнә шулай, — тип гөрләшеп ҡуйҙылар.

... Байтаҡ йырҙар йырланды, легендалары ла иҫкә алынды. Тормошта булған үткән көндәр, ваҡиғалар иҫкә төшөрөлдө, көләмәстәрҙә һөйләнде, һәр кем үҙенсә күңелдәге булған төйөнөн сисеп, күкрәген бушатты...

Фәйзулла ағай банка төбөндәге ҡымыҙҙы бер стаканға ҡойоп:

— Быны ни өләшеп булмай, ни эшләтергә? — тип икеләнеп торғанда, Жәлил ағай:

— Осарым тотошайыҡ, осҡан кешегә булһын, — тигән тәҡдим индерҙе.

Шунда уҡ бер оҙон ғына сыбыҡ та табылды.

— Ирҙәр генә тотамы, беҙ ҙәме?

— Бөтәбеҙ ҙә.

— Улай булһа, осҡан кеше ҡымыҙ эсер алдынан бер йырлаһын, — тинеләр.

Осарым тотошоп сыбыҡтың осона етә башлағас, ҡатын-ҡыҙҙар, хәйләләшеп, тотамдарын ҡыҫа башланы, уларҙың артынан Вәғиз ине. «Улайтмағыҙ», — тип ҡараһа ла, иң оста Вәғиз булып сыҡты.

— Тәүҙә йырла, шунан ғына ҡымыҙҙы эсәһең!

— Мин, ни, йыр белмәйем дәһә ул, йырлағаным юҡ бит, — тип ҡараһа ла, бөтәһе лә унан йыр көттө.

Вәғиз бер аҙ уйланып торҙо ла, тамағын ҡырып алды, шунан үҙе белгән йырын башланы:

Саҡма йылға буйы, эй,
саҡматаш,
Дағаларҙан оса осҡоно.
Ситкә генә күскән ауылдаштар
Ҡайтырҙар ҙа микән йәй көнө.
Йыр бөткәс:

— Бына һин уны, йыр белмәйем, тигән була, бына ниндәй оҫта йырсы икәнһең әле һин... — тип маҡтай-маҡтай ҡымыҙ эсерҙеләр.

Ирҙәр ялан ситенән һыу үренә ынғайланы, ҡатын-ҡыҙҙар аш-һыу урынын йыйыштырып ҡалды.

Был тирәләр иген-фәлән сәселмәй торған сабынлыҡ ерҙәр, шунлыҡтан ер өҫтө тигеҙ. Арыраҡ үргә табан урманлы тауҙар китә, йүкә, имән, саған, һирәкләп йыла, ҡарама ағастары үҫә. Иң күп үҫкәне — йүкә, шуға ла күп кеше ҡорт аҫырай, хатта ҡортсолоҡ совхозы



09.2002.p65 35 04.09.02, 9:32

ла ойошторолған. Унан һәйбәт файҙа алалар.

Әлеге ялан ерҙәр ҡасандыр йыуан имәндәр үҫкән урман булған. Яҡындағыларын ошо тирәләге бер нисә район халҡы һуғыш йылдарында тоҙ ҡайнатҡан саҡта бәләкәй сана менән ташып яндырып бөткән. Урынына ағас ултыртмағандар. Ә үргендәре тапалып ҡороған, ҡаҡ яланға әүерелгән. Был тирәләрҙе Жәлил ағай яҡшы белә, үҙе лә бит үҫмер сағында Усолка мәктәбендә аҙмы-күпме уҡыған кеше.

Улар яр башында яландарға, тауҙарға ҡарап торҙо.

Жәлил ағай:

— Был юл Баяндыға, анау яҡтан Суходолға, Ташлыға бара торған юл китә. Вәгиздең ауылы Саҡма йылғаға ла шунан бараһың, — тип ихласлыҡ менән үҙенең белгәндәрен һөйләй.

— Ауыл иҫ киткес матур ерҙә ине, нишләп һуң әле таралыштылар?

— Халыҡҡа, йәштәргә эш юҡ, электр ҙа юҡ ине. Ауылда башланғыс ҡына мәктәп, артабан уҡытыу өсөн йыраҡ, етмәһә, үҙ телебеҙҙә түгел, — тип һанап китте. — Мал, ҡорт аҫырау өсөн шәп ер ине лә бит, — тип ҡуйҙы ул. Ирҙәр әйләнеп килеүгә ҡатын-ҡыҙҙар юлға әҙер ине. Көн дә ҡыскә ауышты. Ултырған урынды йыйыштырып бөткәс, машинаға тейәлделәр.

Вәгиз атлап ҡайтырға булды.

— Яҡын бит, турыға сығам, — тине ул. Ул бөтәһе менән дә хушлашты, рәхмәт әйтеп, машиналағыларҙы оҙатып алға атланы.

«Ҡайһылай шәп ял булды әле был, бына нисек ойошторорға мөмкин икән уны... Белемле кеше — башлы кеше инде ул. Мин, ни, теге балыҡтарҙы биҙрәһе менән килтерер ҙә: «Бына һеҙгә балыҡ, бешерегеҙ», тиер ҙә ҡуйыр инем. Ә Жәлил ағай әҙер балыҡты тегеләрҙән ҡармаҡ менән тоттортоп ҡыр-ғәләмәт килде. Тотҡан кешеһе ниндәй ҡыуаныс кисерҙе. Ҡатындары алдында бының менән бер ҡарышҡа үҫтеләр бит... Ну Жәлил ағай, шаян кеше», — тип уйлана-уйлана өйөнә ҡайтып етте.

Машина, курортты уҙып бер ни тиклем барғас, туҡталды, башта Жәлил ағай төштө, уның артынан бөтәһе лә сыҡты.

— Килеп хәл белеүегеҙ өсөн һеҙҙең барығыҙға ла рәхмәт, туғандар. Ауырыу-һыҙланыуһыҙ булығыҙ, ошолай һәр саҡ күңелле, яҡты йөҙлө булығыҙ, — тип ҡәнәғәтләнеү белдереп, һәр кем менән ҡул бирешеп хушлашты Жәлил ағай.

— Ярай, үҙегеҙгә ҙур рәхмәт. Бына нисек итеп донъя мәшәҡәттәренән бер аҙға булһа ла арынып, ғүмерҙең бер көнөн, исмаһам, күңелле үткәрҙек. Иҫән-һау ял итегеҙ, — тип хушлаштылар.

Машина күҙҙән юғалғансы Жәлил ағай ҡул болғап ҡалды.

Был уның ғәзиз тыуған яғына ҡайтып, Красноусол шифаханаһында һуңғы тапҡыр ял итеүе булыр тип кем уйлаһын ул саҡта. Ошо иҫтәлекле көн киң күңелле, алсаҡ яҡташыбыҙ, ҙур ғалимыбыҙ Жәлил ағай ғүмеренең бер миҙгеле булып хәтерҙә ҡалды.



09.2002.p65 36 04.09.02, 9:32